Государственное бюджетное общеобразовательное учреждение
Стерлибашевская коррекционная школа-интернат для обучающихся
с ограниченными возможностями здоровья

| Рассмотрено на заседании ШМО старшего звена | Согласовано | Утверждаю |
|---|---|---|
| Протокол № 5 от «29» мая 2018 г. | Заместитель директора по УР | Директор ________ Афанасьев А.А. |
| Руководитель ________ Каримова АА. | ________ Гайнуллина Д.Р. | «03» 09 2018 г. |
| | «31» 08 2018 г. | |

# Рабочая программа
# по башкирскому (государственному)языку
# для 5а класса

**Срок реализации программы 1 год**

**учитель**

**Хуснетдинова Ф.С.**

2018-2019 учебный год

Аңлатма яҙыу

Һаулығы буйынса мөмкинселеге сикләнгән уҡыусыларҙың 5 а класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.
Эш программаһы В.В.Воронкованың VIII-се төрҙәге махсус(коррекция) дөйөм белем биреү һәм АООП Стәрлебаш һаулығы буйынса мөмкинселеге сикле уҡыусыларҙың махсус (коррекция) дөйөм белем биреү программаһына нигеҙләнеп төҙөлгән.
**Дәреслек:** М.Ғ.Усманова,З.М.Ғәбитова. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2010.
**Программа кимәле :** базис
**Уҡытыусының тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:**
З.М.Ғәбитова, Х.А.Толомбаев. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр.Өфө – 2006.
М.Ғ.Усманова, З.М.Ғәбитова. Башҡорт теленән диктант һәм изложениелар йыйынтығы. Өфө – Китап – 2009.
**Уҡыусылар өсөн тел буйынса уҡыу- уҡытыу методик комплекты:**
Дәреслек: М.Ғ.Усманова,З.М.Ғәбитова. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы уҡыусылары өсөн. – Өфө : Китап, 2010.
**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:** Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре -Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.- Ижевск: «Книгоград», 2008.
Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа « Бәләбәй ҡалаһы» муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.
**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла**
«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.
**Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән**
- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;
- тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
- лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).
**Башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаттары һәм бурыстары:**
Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радио- телетапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
Башҡорт теленең өндәрен, һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеп,үҙ-ара һөйләшергә, тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һөйләргә өйрәтеү.

Дәреслектәге, уҡыу ҡулланмаларындағы текстарҙы, башҡорт телендә сыға торған “Йәншишмә”, “Аҡбуҙат”, “Аманат” гәзит-журналдарын үҙ аллы һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен биреү.

Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп,үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.

Башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**Һаумы, мәктәп! (4 сәғәт)**

Был тема (1 сентябрь – Белем көнө.Мәктәп, уҡыу, белем алыу, тел өйрәнеү) башлыса “Көҙ” темаһы менән бергә үрелеп бара. Бер үк ваҡытта, уҡыусыларҙың йәйге каникулды нисек үткәреүе тураһында әңгәмә үткәреү, фекер алышыуҙар ойоштороla. Был темаларға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу йәһәтенән яңылары үҙләштерелә.Башҡорт теленең өн-хәрефтәре, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Исем. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Сифат.

**Үҙем тураһында (4сәғәт)**

Был теманы үҙләштереү барышында уҡыусы үҙе тураһында,үҙенең ғаилә ағзалары, яҡындары тураһында һөйләргә өйрәнергә тейеш. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Алмаш. Зат алмаштары. Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. к-г,ҡ-ғ тартынҡыларының сиратлашыуы.

**Йыл миҙгелдәре (5 сәғәт)**

Йыл миҙгелдәре, һәр йыл миҙгеленә хас үҙенсәлектәр менән танышыу. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә һәм телмәрҙә ҡуллана белеү. Һорау алмаштары.Күрһәтеү алмаштары. Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреше. Билдәһеҙлек алмаштары. Билдәләү алмаштары.

**Башҡортостанды беләһеңме? (3 сәғәт)**

Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу. Уҡыусы аңына үҙе йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре һ.б. хаҡында бер бөтөн  тыуҙырыу һәм ул турала һөйләй белеүҙәренә өлгәшеү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Юҡлыҡ алмаштары.

**Кеше. Тән ағзалары.шәхси гигиена. (4 сәғәт)**

Был тема кешенең тән ағзалары, эске органдарының атамаларын белеү менән бергә шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау-сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Ҡылым.

**Ҡыш. (3 сәғәт)**

Яңы йыл темаһы ҡыш темаһы менән берлектә алып барыла. Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү, Яңы йыл менән туғандарҙы, яҡын кешеләрҙе ҡотларға өйрәтеү, һәр байрамдың үҙенә генә хас күренештәре тураһында һөйләтеү. Ҡылымдың зат һәм һан менән үҙгәреше.

**Аҙыҡ-түлек.Кейем-һалым. Өй . Магазин. (4 сәғәт)**

Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларын өйрәнеү, һатып алыу этикеты менән таныштырыу, һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү. Синоним.

**Яҙғы эштәр.(2 сәғәт)**

Яҙғы эштәр, яҙғы баҡса эштәре,баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү. Һан. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Яҙғы байрамдар. (4 сәғәт)**

Башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың яҙғы тәбиәғәт менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәре һәм матур йолалары тураһында һүҙ алып барыла. Уҡыусыларға уларҙың кеше тормошондағы әһәмиәте, мәғәнәләрен, уларҙы тергеҙеү кәрәклеген еткереү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**V класс укыусыларының белем кимәленә талаптар.**

1.Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу; 3-6 һөйләмдән торған

диалогты аңлау, уны дауам итә белеү;
2. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған диафильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
- предметны, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде булдырыу;
- хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
2-3 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
- тиҙәйткестәрҙе, һынамыштарҙы шыма итеп әйтә белеү.
3.Тексты шыма, аңлы, тасуири уҡыу;
-текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү;
-текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
-хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын айыра белеү.
4. Ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;
- текст буйынса һорауҙарға биреү;
-бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү

**Уҡыу-укытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

**Баһалар нигеҙҙә укыусыларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыкһыныу дәртләндереү маҡсаты менән ҡуйыла.**

“5” билдәһе ҡуйыла: әгәр уҡыусы һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыһа,паузаларға иғтибар итһә,һорауҙарға тулы яуап бирһә; укылған текстың йөкмәткеһентулы итеп һөйләп бирһә.

“4” билдәһе ҡуйыла: әгәр укыусы ижекләп уҡыһа,укығанда 1-2 хата ебәрһә,текстың йөкмәткеһен тулыитеп һөйләмәһә,шиғырҙарҙы уҡытыусы ярҙамында һөйләһә.

“3”-билдәһе әгәруҡыусы ауыр һүҙҙәрҙе ижекләп тәу укый алмаһа. Паузаларҙы дөрөҫ ҡулланмаһа. Текстың йөкмәткеһен укытыусы ярҙамында һөйләһә .

**Яҙма эштәрҙе баһалау**

Контроль эштәр: контроль диктанттан һәм контроль күсереп яҙыуҙан тора. Шулай уҡ грамматик эштәр тәкдим ителә.
Диктанттар күләме:
5-се синыф: 40-50 һүҙ

**Диктанттар**

“5”- әгәр эш бер хатаһыҙ эшләнһә
“4”-1-3 хата
“3”-4-5 хата

**Грамматик эштәр**

“5”-әгәр эштәр бер хатаһыҙ эшләнһә
“4”-3/4 эш дөрөҫ эшләнһә
“3”-1/2 эш дөрөҫ эшләнһә

**Контроль күсереп яҙыу**

“5”-хатаһыҙ дөрөҫ яҙылһа
“4”-бер хата һәм бер төҙәтеү
“3”- ике хата һәм бер төҙәтеү
Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була. Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт  теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн укытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
  Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

  Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала:
  **Башҡорт (дәүләт) телен өйрәнеү өсөн укыу - укытыу методик ҡулланмалар.**
  1.Усманова М. Г. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа. 2006.
  2. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.- Өфө:Китап, 1996.

**Материал-техник  кулланмалар:интерактивтаҡта.**

**Төп һәм өҫтәлмә әҙәбиәт**
1.З.М.Ғәбитова, М.Ғ.Усманова. Башҡорт теле: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-се класы укыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2010.
2.З.М.Ғәбитова, Х.А.Толомбаев. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр.Өфө – 2006.
3.М.Ғ.Усманова, З.М.Ғәбитова. Башҡорт теленән диктант һәм изложениелар йыйынтығы. Өфө – Китап – 2009.
4.Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
5.Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
6.Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
7.Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
8.Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтҡолова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
9.Журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Аҡбуҙат», «Аманат»..

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре:**
Диктант – 2

Диктанттар күләме: 40-50һүҙ

Һүҙлек диктанты: 12-15 һүҙ

Календарь – тематик план 5А класс

Программа буйынса : 34 сәғ.

План буйынса: 34сәғ.

| № | | Тема | План. дата | Факт. дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **1.1-4 синыфтарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау** | | | |
| 1. | 1.1 | Башҡорт алфавиты. Башҡорт теленең өн һәм хәрефтәре. | 05.09 | | |
| 2. | 1.2 | Беҙҙен ғаилә. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. | 12.09 | | |
| 3. | 1.3 | Мәктәп. Исем. Исемдең күплек ялғауы, һан менән үҙгәреүе. | 19.09 | | |
| 4. | 1.4 | Беҙҙен синыф. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.Ҡурай моңо. Сифат. | 26.09 | | |
| | | **2. Үҙем тураһында.** | | | |
| 5. | 2.1 | Контроль диктант “Көҙ”. Исемден килеш менән үҙгәреүе. | 03.10 | | |
| 6. | 2.2 | Хаталар өҫтөндә эш.Үҙем тураһында. Исемдең килеш менән үҙгәреүе. | 10.10 | | |
| 7. | 2.3 | Минен әсәйем. Зат алмаштары, уларҙың килеш менән үҙгәреүе. | 17.10 | | |
| 8. | 2.4 | Көн режимы. Беҙҙең фатир. Эйәлек алмаштары. | 24.10 | | |
| | | **3. Йыл миҙгелдәре.** | | | |
| 9. | 3.1 | Өләсәйгә хат яҙам.К-Г,Ҡ-Ғ,П-Б тартынҡыларының сиратлашыуы. | 07.11 | | |
| 10. | 3.2 | Был кайһы ваҡыт? Сифаттың исем менән ярашыуы. | 14.11 | | |
| 11. | 3.3 | Көҙ көнө һауа торошо. Һорау алмаштары.Күрһәтеү алмаштары. | 21.11 | | |
| 12. | 3.4 | Дүрт теләгем бар. Билдәһеҙлек һәм билдәләү алмаштары. | 28.11 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 13. | 3.5 | Яраҡкан миҙгелем. Сифат. Антонимдар. | 05.12 | | |
| | | **4.Башҡортостанды беләһенме ?** | | | |
| 14. | 4.1 | Урал-башҡорт иле. Янғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | 12.12 | | |
| 15. | 4.2 | Салауат Юлаев һәйкәле.Уртаҡлыҡ исемдәр. | 19.12 | | |
| 16. | 4.3 | Башҡортостан байлыҡтары.Тәбиғәтте һаҡлайыҡ! Һорау һөйләмдәр. | 26.12 | | |
| | | **5. Кеше. Тән ағзалары.Шәхси гигиена.** | | | |
| 17. | 5.1 | Тән ағзалары. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. | 16.01 | | |
| 18. | 5.2 | Шәхси гигиена.Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 23.01 | | |
| 19. | 5.3 | Кеше. Сифатты ҡабатлау. | 30.01 | | |
| 20. | 5.4 | Дарыу үләндәре. Ҡылым. | 06.02 | | |
| | | **6. Яны йыл менән!** | | | |
| 21. | 6.1 | Башҡортостанда ҡыш. Исемдең күплек ялғауы. | 13.02 | | |
| 22. | 6.2 | Санғы шыуабыҙ. Ҡылымдарҙын зат һәм һан менән үҙгәреүе. | 20.02 | | |
| 23. | 6.3 | Ергә аҡ ҡарҙан юрған ябылған. Ҡылым.Ҡылымдарҙын зат һәм һан менән үҙгәреүе. | 27.02 | | |
| | | **7.Аҙыҡ-түлек.Кейем-һалым. Магазин.** | | | |
| 24. | 7.1 | Аҙыҡ-түлек. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре.Исемдең һан менән үҙгәреүе. | 06.03 | | |
| 25. | 7.2 | Кейем–һалым.Синонимдар. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе | 13.03 | | |
| 26. | 7.3 | Мул уңыш үҫтерәбеҙ. Ҡылым.Исем. | 20.03 | | |
| 27. | 7.4 | Ҡымыҙ-файҙалы эсемлек. Интонация буйынса һөйләм төрҙәре. | 03.04 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | **8.Яҙ етте.** | | | |
| 28. | 8.1 | Яҙ килә. Омонимдар. Башҡортостанда яҙ. | 10.04 | | |
| 29. | 8.2 | 9-Май-Еңеү байрамы.Кем? Нимә? һорауҙары. | 17.04 | | |
| 30. | 8.3 | Баҡса эштәре.ЙЫ,ЙЕ,ЙО,ЙӨ,ЙҮ ҡушымсалары. | 24.04 | | |
| 31. | 8.4 | Контроль диктант “Йәй етә”. | 08.05 | | |
| 32. | 8.5 | Хаталар өҫтөндә эш. Сифат. Сифатты нығытыу. | 15.05 | | |
| 33. | 8.6 | “Интонация буйынса һөйләм төрҙәре” темаһын йомғаҡлау. | 22.05 | | |
| 34. | 8.7 | 5-се синыфта үткән темалар буйынса йомғаҡлау дәресе. | 29.05 | | |

Прошнуровано и пронумеровано

8 (восемь) листов

«____»__________201 г.

Директор ______________ А.А. Афанасьев

ГБОУ Стерлибашевская КШИ

ОГРН 1020201337738

ИНН 0241003061